# Шиғырҙар аша тәбиғәткә һөйөү

2017
год экологии
в России

Экология йылына арнап, Буранғол ауылы китапханаһында Бөтә донъя шиғриәт көнөндә «Шиғырҙар аша тәбиғәткә һөйөү» кисәһе уҙғарылды. Сараға физик мөмкинлектәре сикләнгән шиғыр һөйөүселәр саҡырылды. Шиғриәт сәғәте Буранғол ауылы ҡыҙы, шағирә Земфира Әбүшахманованың тыуған төйәге матурлығын данлаған шиғри юлдары менән асылды. Мәҙәниәт йорто етәксеһе Гөлназ Мәғәфүрова «Тыуған ауылым» йыры менән тәбрикләне. Китапханасы Айгөл Баязитова «Башҡортостан ҡоштары» китап күргәҙмәһе менән таныштырҙы, ҡыҙыҡлы викторина уҙғарҙы. Яҡташ шағирәләр — Сәфинә Солтанованың «Үткән ғүмер», Рәшиҙә Мансурованың «Таңғы ямғыр», Земфира Әбүшахманованың «Гәүһәр ташым» йыйынтыҡтарынан тыуып-үҫкән төйәккә бағышланған шиғырҙарын китапханасы Миңзәлә Хәйруллина уҡып ишеттерҙе. Ҡунаҡтар Рәхилә Әбдрәхимова, Мәндүҙә Солтанова, Ишкилденән Гөлшат Зарипова, Исмәғил Шаһивәлиев яратҡан шағирҙарының әҫәрҙәрен һөйләне. Кисәгә оҙаҡ йылдар инвалид балалар тәрбиәләгән әсәләр ҙә саҡырылғайны. Инвалидтар ойошмаһы етәксеһе Рәсилә Вәлиева пландары менән уртаҡлашты, сараларҙа әүҙемерәк ҡатнашырға саҡырҙы.

Шиғриәт сәғәтен китапханасы Миңзәлә Әдип ҡыҙы ойошторҙо һәм алып барҙы. Кисә түңәрәк табын артында сәй эсеү һәм иҫтәлеккә фото төшөү менән тамамланды. Унда ҡатнашыусылар йөкмәткеле, ҡыҙыҡлы сара ойошторғандары өсөн китапханасыларға рәхмәт әйтеп таралышты.

Д. САФИУЛЛИНА.